# Ата-әсәйҙәргә кәңәштәр

**Баланы тәрбиәләгәндә иң мөһиме ҡысҡырмаҫҡа, баланы нисек бар, шулай яратырға. Шулай итеп…**

**-Баланың һорауҙарына тыныс һәм дөрөҫ яуап бирергә. Ашыҡһағыҙ, ваҡытығыҙ булмаһа ла ҡысҡыра башламағыҙ, уны ҡапыл бүлдермәгеҙ; -Баланың һорауҙарын етди ҡабул итегеҙ;-Баланың үҙе өсөн генә айырым бүлмә булырығыҙ;**

**-Бала үҙенең эштәрен һәм ҡаҙаныштарын күрһәтә алған урын булһын;**

**-Баланың өҫтәлендәге тәртипһеҙлек ижади эш менән бәйле булғанда әрләшмәгеҙ. Әммә эште тамамлағас урынын йыйыштырып ҡуйыуын талап итегеҙ;**

**-Баланы ниндәйҙер уңыштары өсөн түгел, ә нисек бар шулай яратыуығыҙҙы күрһәтегеҙ;**

**-Балаға ҡулынан килерҙәй эштәр ҡушығыҙ;**

**-Балаға үҙ пландарын төҙөргә, ҡарарҙар ҡабул итергә ярҙам итегеҙ;**

**-Эшенең һөҙөмтәләрен яҡшыртырға булышығыҙ;**

**-Үҙегеҙ менән ҡыҙыҡлы урындарға сәйәхәткә алығыҙ;**

**-Балағыҙҙың кәмселектәрен күрһәтеп башҡа балалар менән сағыштырмағыҙ;-Баланы кәмһетмәгеҙ;-Баланы үҙаллы фекер йөрөтөргә өйрәтегеҙ;**

**-Баланы китаптар, уйынсыҡтар менән тәьмин итеп тороғоҙ;**

**-Баланы төрлө ваҡиғалар уйлап сығарырға, фантазияларға өйрәтегеҙ. Быларҙы бергә башҡарығыҙ;**

**-Баланы кесе йәштән китап уҡырға өйрәтегеҙ;**

**-Уның ихтыяждарына иғтибарлы булығыҙ.**

maXnika